*Әлмирә СӘСӘНИӘ*

# Аһәң име

Үҙ халҡымдың фәлсәфәһе һәм сәнғәте,
Фәне, дине, Йолаһы һәм сәнәғәте,
Теремеклек аша күргән бар булмышы —
Заманымдың иң мөләйем нәзәкәте.

Ҡайнап-урғып үткәндәрҙе тын тикшереп,
Хәтерҙәге упҡындарға шым ишелеп,
Ҡарашынан ҡапыл күккә йәйғор сөйөп,
Керешенә баҫып ҡалҡа саф кешелек.

Тормоштоң был төҫлө фаза күперендә
Ҡайта сафтар бала сағы фекеренә:
Беҙ үтһәк тә, салауатым доғалары
Яҡты моңом булып ҡала Һыу-Еремә.

Был йәйғорҙо йәшмәләрем нурландыра,
Урал иле матурлыҡта уйландыра.
Күпме генә яу үтһә лә, беҙ булдыҡ, бар,
Буласаҡбыҙ, аҡ фәлсәфә ҡора-ҡора.

Аптыратып үтә беҙҙе буй батыры,
Һоҡландырып ҡуя беҙҙе туй батыры.
Тәне китә, йәне ҡала беҙҙең менән
Аҡ фәлсәфә ҡора алған уй батыры.

Ебәрмәйбеҙ үткәндәргә ҡаһарманды —
Беҙҙең өсөн яҡты ижад атҡарғанды.
Фекерҙең дә сәнәғәте төрлө була,
Ғәзиз беҙгә күңелдәрҙе аҡлағаны.



Мең ҡатмарлы ағымдарҙың кинәйәһе,
Ҡапма-ҡаршы елдәрҙең геү әйләнәһе,
Быуат аша ҡайтып килгән туғандарҙың
Уй батыры маңлайында йәнләнәһе.

Төрлө һөнәр белемдәрен тойоп, бағыу,
Төрлө ҡатлам ғилемдәрен йыйып алыу,
Айырымдарҙы тоташ итеп, бөтөнәйтеп,
Бөтөнлөккә үҙ аһәңең имен яғыу.

Аһәң име — туҡһан процент сиргә шифа,
Имләнгәндең күңеле саф, рухы зифа.
Был ғәмәлгә өйрәтмәй бер уҡыу йорто,
Әммә мәңге йәшәй Ерҙә үр вазифа.

Философик мауыҡтырғыс һауыҡтырыу —
Рәссам булып рухиәттә һаулыҡ ҡороу.
Үҙ теләнең аҡылына ғашиҡ кеше
Инаныҫка маҡсат таба — көрсөк йырыу.

Үр вазифа атҡарғанда, бел, батырым,
Һәр беребеҙ һуҙа һиңә ҡеүәт нурын.
Һәр беребеҙ көтә һинең асылғанды,
Ҡарашынан өҫтәп һиңә аң матурын.

Фаный донъя алдатҡыстыр көсһөҙҙәргә,
Яман күп, тип, тойолалыр ишһеҙҙәргә.
Уй батыры эшләгәндә етемдәр юҡ,
Сабыйҙар ҙа тоя быны бишектәрҙә.

Ни тойғанын аңламайҙыр ҡапыл ғына,
Әлләл баҫып, елкенәлер таһыл ғына.
Күмәртә-йән ойошҡанын аңлай бары
Үҙ ҡеүәтен ихлас биргән аҡыл ғына.

Ғәжәйеп тә асыштарға еткәндә — бел:
Мәңгелектән тыңлай һине үлемһеҙ Ил,
Өйкөм-инәң алғаритм итеп ала
Үткәргәнде балдаҡ аша ебәктәй тел.

Ғәләм тыңлай был мәлдәрҙә ихлас тынып,
Ғәзиз уға философтың йөҙө-һыны.
Әҙмәүерҙәр бөжәк ише үҙ юлында,
Ә баҡыйлыҡ һиңә фиҙа, батыр моңо.

Үҙ күсәрен тиреләтеп әйләнгәндәр —
Ҡояш нурын алыу өсөн йәнләнгәндәр:
Яртың янып, яртың туңып яфаланыу
Бәрәбәр бит терек тыумаҫ хәйләләргә.

Әйлән, донъя, нурҙар ғәҙел йылытһындар,
Ғәҙел Илдә етемлекте онотһондар.
Уртаҡ Тәңре әсә булып балҡығанда,
Батырҙарым шик-шөбһәһен һулытһындар.

Әйлән-бәйлән уйнай мәңге Ҡояш күсе,
Шуға арта есемдәрҙең ҡеүәт-көсө.
Шуға тере донъя ҡеүәт алмашыуын —
Ғәҙеллек, тип, тыя ала туңыу үсен.

Ҡояш рухлы батыр миңә ҡарағанда,
Былбыл булып тос аҡылым һайрағанда,
Әйләнеп тә тағы ҡайтып ҡыуанамын —
Азат бит мин ҡатып ҡалған һарандарҙан.

Шау ҡеүәттән торған йәннәт — Ҡояштыр ул,
Утшәхестең аһәң һүҙе — им-аштыр ул.
Уй ҡөҙрәтен камил һүҙҙән ҡабул итеп,
Һөйөнөстән ҡанатланыу — ожмахтыр ул.

Үҙ ожмахың сәсә алмау — йәһәннәмдер,
Орлоҡтары затһыҙ булған күңел кәмдер.
Баҡыйлыҡта шәкерттәрен үстереүсе —
Ҡояш ише балҡып торған олуғ йәндер.

Диҡҡәтсеһе тыйнаҡлыҡта әҙәп һаҡлап,
Фиҙалары үр инсанын ғәжәп яҡлап,
Үҙ эштәрен тоғро ғына үтәгәндә,
Төшмәй бит ул Илде һөйөү арзан хаҡҡа.

Ыҫпай ғына әйләнгеләп утшәхесте,
Эстән генә ятлап уның аҡ дәресен.
Тырышалыр һәр берeһе үҙ эшендә,
Саф батырға шәкерт итмәк һәр бәпесте.

Тимер Ҡаҙыҡ тирәләйме — йондоҙлоҡтар?
Сағыштырыу өсөн генә — бар ҡыҙыҡтар...

Тәү нөктәнән таралһа ла төрлө урай,
Тосланыша бары ҡабат ҡыҙыу тупҡа.

Яралып та, таралып та, йыйналышып,
Уралышып, файҙа ҡәрҙә һыйланышып,
Һулҡып тора ғәләм — Ватан баҡыйлыҡта,
Рух нығытып, йәм бирешеп, йәм алышып.

Һыҙланыуың шиктәренән мәлгә уян:
Ер-һыу тәңрең хозурында бар тос оян —
Сит илдә лә Ватанына тоғро йәндә
Ғәзиз ергә ҡайтып ятыу — һуңғы хыял.

Гүзәл ерең ҡуйынынан ҡурҡма, балам:
Булмышыңды яратыусы булһа Аллаң,
Үҙ ереңдән башҡа кем бар дастаныңда?
Уралыңды бирмәгәнгә Ул таң ҡала.

Һәр йәмғиәт үҙ ағымы, үҙ елендә,
Оҡшаш тарих бара күптәр фиғелендә.
Хакимлыҡтан баш тартыусы бер шаһзада
Камиллыҡты тапҡан үҙенең күңелендә.

Тәү пәйғәмбәр эҙе ҡалған төбәгеңдә
Кәшәнәләр ауаз бирә йөрәгеңә.
Батҡағы ла һирәк шифа булған иләү
Үҫә бар Ибн Сина зирәгенә.

Үҙе рәссам булған ерҙең рәссамдары,
Үҙе сәсән булған ерҙең сәсәндәре
Өсөнсө мең тупһаһында шау хазина —
Эш-мөхәббәт булып бөткән әҫәрҙәре.

31.03.2000.

# Аҫыл кәр

Күңел нурҙарың менән
Өйөрөңдө туплаған Осар йән,
Ер шары өҫтөндә ҡанат елпегән географ,
Үҫмерлек иленә алып ҡайтҡан утшәхес,
Кассандра тамғаһын юйған Ил Ҡото!
Кейек ҡаҙҙарың, аҡҡоштарың, торналарың,
Төрлө ырыуың ҡоштары
Тоталитарлыҡта манҡортлашып,
Һиңә һөжүм итһә,
Туп бармы?
Тупты төҙөү, ойоштороу, һаҡлау еңелме?
Нурҙары кәмемәйме күңелдең?

Төркиҙәр саваннаһы буйлап утлаған
Йөҙәр түбәнле сайгактар, тарпандар,
Өйөрҙө аслыҡтан, йыртҡыстан, ҡамауҙан,
Тоҙһоҙ йә һыуһыҙ ареалдарҙан,
Ҡояш әүҙемлегендәге йоттарҙан —
Ҡоролоҡтан, сирҙәрҙән, хаостан
Нәҫел түлен һаҡлайым, тип,

Үрнәк затты аҡлайым, тип,
Тояҡтарҙы туҙҙырып, ҡанатып,
Йыртҡыстарҙы тибеп, ҡан ялатып,
Азатлыҡҡа алып сығыу еңелме?
Аҫау-аҫаба, һүрелмәйме күңелең?

Океандарҙы иңләгән
Дельфиндар, киттар, кашалоттар,
Мәғлүмәт неврозымы анархия йото?
Тотош көтөү менән ярҙарға ташланып,
Ғәйепләйһегеҙме аҙған әүҙем нурҙарҙа
Аҙашып, башы буталған,
Асыл баҫҡыстарын юғалтҡан
Өйөрҙөң ҡотон?
Еүеш фәйрүзә йыһанында,
Йәиһә ҡоро кислород океанында
Йөҙгөстәрен елпегән туғандарым!
Текә урайлы урағандар
Өҫтән йә аҫтан бәргәндә,
Психотрон ҡоралдай шым һыҙғырып

Бүтән күмәртә-йән ҡеүәт һурғанда,
Һомайға инанығыҙ — ул ишетә,
Башыңа йәбешкән бәрәс тиреһен
Тереһыу менән йыуып төшөрөп,
Үҙ затыңа дан йырлаттырып,
Ул һине аҫылйәр кеше итә.

Бүтән туптарҙың рәсүлдәре
Уралды төйәк итә алмай —
Бында беҙ яралған,
Көнгә көлөп ҡараған, ҡыҙынып ҡаралған,
Тармыттар таралған...
Буш түгел аралар.
Уңала яралар.
Был ерҙе беҙ камил беләбеҙ,
Ул көйгәндә беҙ ҙә көйәбеҙ.
Ҡаныбыҙ ошонда, тиребеҙ ошонда,
Йәшебеҙ ошонда, һутыбыҙ ошонда
Түгелгән Иҙелдәй.

Бүтән күмәртә-йән үҙен һаҡлаттырып,
Талашҡан һайын яҡлаттырып,
Беҙҙе күп ҡырҙырған —
Ҡәбергә алып кит миҙалын...
Тик мәңге беҙҙең Көнөбөҙ ҡалҡа
Иртәнге нурҙарын киреп,
Төштәренән көлөп-ҡыҙарып.
Самрау уны ныҡ яратҡандыр,
Ҡосмосона ҡосоп, һөйөп, иркәләп.
Керпектәрен төшөрөп,
Кемдәр эстән ҡыуанмай
Алһыуланған иртәлә...

Ҡаршылай тәңрене мәҙхиә —
Салауаттың ҡобайыр-доғалары,
Ҡоштарҙың Ҡояшҡа урғылған
Йыр йәйғорҙары, сут-сут доғалары.
Балаларының «хәйерле иртә!»һен ишеткән
Көн тәңре һил, йыйнаҡ — тын
Әҡлимдең самаһын уйлап,
Миҙгелде йәтешләй, аһәңләй —
Ем булһын бәхеткә.
Емелдәй ем
Ысыҡта, ҡошсоҡта, орлоҡта,
Йәшмәлә, йәштәрҙә, олола,
Мәрхәмәт-шәфҡәттә,
Кеселек-ҙурлыҡта...
Бойоҡма!
Һыйышырбыҙ әле нисек тә.
Тыныслыҡ дәүере кисекмәй,
Ул килә,
Бик оҙаҡ көткәнгә һағынған,
Алмағас шәлдәрен ябынған,
Ҡайындың май шәлен,
Тирәктең өҫтәрен,
Күбәләк елпешен...
Ул һиндә эҙләй бит
Аңлауҙы, һанлауҙы —
Үҙ ишен.

Тыныслыҡ дәүере —
Ул аҡбуҙ һәүерек,
Тупланып тосланған
Сифаттар ижады,
Ватандың-Одиндың
Ил ҡотлар выжданы.
Ҡылыстан — ҡәләмгә,
Көрсөктән — ғәмәлгә!
Өс төҫлө әләмдә
Ҡыҙыл юҡ.
Ул ҡалған еләккә,
Сейәгә, миләшкә,
Ул таңғы Ҡояшта
Тын яҡут.

Боларып, борхолоп,
Шартлап һәм ҡырҡылып
Был быуат үткәндә
Кем һуң беҙ?
Өйкөм Инә телле,
Ҡатмарлы вазифалы,
Ҡасаҡтарҙы һыйҙырып,
Мәскәү менән Ҡафтау араһына
Аҡ яулығын һалған,
Боронғо һәм йәш
Иллебеҙ.

Ҡобайырға мөкиббәндәр,
Баш төкөшмәгеҙ,
Изгелектәр унда — океан.
Халыҡ заруратын
Тойоп асылғанда,
Төрлө нуры атылыр
Йәйғорҙан.
Хазина — асылдар,
Хаж-Инә аҫылдар,
Төмән йылдарҙың кинәйәләре
Беҙгә ҡайтҡандай
Эҙ
Ҡалһын үҙебеҙҙән.

Синхрон синэргия
Ысынланып,
Берҙәм тупта осҡан
Аҡҡоштар
Күк көмбәҙгә
Аҡ шынаны сыйып,
Йән нурҙары геүләй
Балҡышта.
Баба-инәләрем
Ошо тупта
Ата-әсәм менән
Бергәләп.
Изге йәндәр
Һаман ҡеүәт бирә,
Хәлһеҙ саҡтарымда
Иркәләп.
Шым һыҙғырһа
Манҡорт итмәк ҡорал,
Атылышып
Ошо шынанан,

Ике аҡҡош
Башым ҡосаҡлай ҙа,
Еңел иркенәйеп
Тын алам.
Ғилемдәре
Миндә емеш бирә,
Өмөттәре
Миндә аҡлана.
Еңеүселәр
Еңеүемде күрә,
Ҙур бәләләр
Ҡапыл ваҡлана.
Күтәрелеп,
Урай-урай осоп,
Һеңә улар
Көләс тәңрегә,
Юғалырҙан алда
Кеше булып,
Тоташтырып
Йыһан ҡәренә;
Әйтерһең дә,
Планеталар күсе —
Йәшел ихатаһы
Өйөмдөң,
Атлап киткән
Сабыйына ҡарап,
Атам-әсәм көлә
Һөйөнөп...
Оса шына
Бар тарихы менән
Геомагнит
Еҫен иҫәпләп
Геоценоз,
Биоценоз аша
Самрау биргән
Тәүге төбәккә.

Тарихыбыҙ аша
Киләсәккә
Үҙебеҙҙең күңел
Нурынан!
— Кем һин, яңы башҡорт?
— Мин Ватанда —
Мин Уралда
Борон-борондан!
Мәғәниәт
мәҙәниәтенән
Мин йыһандың
әҙәбиәте.
Баллы ысыҡ
мәғрифәтсеһенән
Мин тыныслыҡ
әҙәмиәте.
Етмеш ете төҫлө
таштарыма
Сәскәләрем ҡарай
һуш йыйып.
Даһи аһәң һыйған
башҡайымда
Фәнем — моңом аға
ҡушылып.



Ерем гүзәллеген
йырлайым да,
Эшкәртеүҙән йәлләп
илайым.
Сәнәғәттең дәртен
ҡырлайым да,
Саф Тәбиғәт хаҡын
уйлайым.
— Кисер! — тиеп үбәм
ергенәмде,—
Яра һалдыҡ,
тағы һалыныр...
Ошо яра минең
күңелемдә!
Унан бер мәл
Сама ҡалҡыныр
Гүзәллеккә
тиң сәнәғәт булып —
Һаҡсыл оҫталарҙың
ҡомары.
Йәм илендә
тын йәмәғәт булып,
Башын тотор
башҡорт юғары.
Бәхет
рекламаға мохтаж түгел,
Тулған күңел
кирә ҡанатын.
Ерҙән үткәндә лә
ғажиз күңел
Ер ҡуйынына
ятыр яратып.
9,14.03.2000.